БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ДЫУАН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ МӘСӘҒҮТ АУЫЛЫ ЛИЦЕЙЫНЫҢ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТЛЫ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ ФИЛИАЛЫ ИҪКЕ ХӘЛИЛ АУЫЛЫ ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ

Ҡабул ителгән:
педагогик Совет
протоколы № 1 25.08.21й.

Раҫлайым:
Директор урынбаҫары: Ҡазыев Ф.Р.
____________________
Бойороҡ № 35 27.08.21й.

# Эш аҙнаһына белем биреү эшмәкәрлеген планлаштырыу

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ДЫУАН РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ МӘСӘҒҮТ АУЫЛЫ ЛИЦЕЙЫНЫҢ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТЛЫ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ ФИЛИАЛЫ ИҪКЕ ХӘЛИЛ АУЫЛЫ ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ-нең белем биреү эшмәкәрлеге планы

- «Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» ғы Федераль закон (29.12.2012 й. №273- ФЗ)
- Приказ Минобрнауки России от 17.10.2013 N 1155 "Об утверждении федерального государственного образовательного стандарта дошкольного образования"
- Приказ Министерства образования и науки РФ от 30 августа 2013 г. № 1014 "Об утверждении Порядка организации и осуществления образовательной деятельности по основным общеобразовательным программам - образовательным программам дошкольного образования".(с изменениями на 21 января 2019 года)
- Санитарно-эпидемиологические правила и нормативы СанПиН 2.4.1.3049-13 «Санитарно-эпидемиологические требования к устройству, содержанию и организации режима работы в дошкольных организациях» (утв. постановлением Главного государственного санитарного врача РФ от 28.09.2020 г. № 28).
- Н.Е.Веракса, Т.С. Комарова, Э.М.Дорофеева редакторлығындағы “Тыуғандан алып мәктәпкә тиклем” мәктәпкәсә дөйөм белем биреү программаһына таянып төҙөлгән.

Уҡыу йылы 1 сентябрҙә башлана һәм 31 майҙа тамамлана. Балалар баҡсаһы 5 көнлөк эш аҙнаһы режимында эшләй. Белем биреү эшмәкәрлеге башҡорт һәм рус телендә алып барыла.

2021-2022 уҡыу йылында төрлө йәштәге балалар төркөмө эшләй.

План эстәлеге ике өлөштән тора: беренсе өлөшөндә балалар мотлаҡ үҙләштерергә тейешле булған (60%) федераль кимәлдә тәҡдим ителгән һәм федераль реестрға ингән Төп мәктәпкәсә белем биреү өлгө программаһы материалдарына ярашлы алынған йөкмәтке бирелә. Икенсе өлөшөндә (40%) белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар бирелә. Һәр ике өлөштә бирелгән материалдар бер-береһенең йөкмәткеһен тулыландырып, асыҡлап, балаларға тирә-йүнде танып-белергә, улар нигеҙендә үҙ-аллы төрлө һығымталар яһарға һәм шул рәүешле уларҙың аҡыл-зиһен кимәлен үҫтерергә ярҙам итеүҙе күҙаллай.

Белем- тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынына һайлап алынған өлөш һәм милли төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырылған парциаль программалар:

“Башҡортостан- тыуған илем” мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн Башғортостан Республикаһын өйрәнеү программаһы. (Ф.Һ.Аҙнабаева, Г.Ш. Әлбәкова, Ә.Р.Буранбаева, К.Ф. Мортаева)

Парциальная программа обучения русской разговорной речи в башкирских детских дошкольных образовательных учреждениях (Давлетбаева Р.Г., Азнабаева Ф.Г., Каримова Я.С., Кагарманова Ф.)

“Төҫлө ижад”парциаль программаһы Дубровский Н.В.

Уҡытыу-тәрбиә эше тәрбиәләнеүселәрҙең контингентын, уларҙың шәхси үҫеш һәм йәш үҙенсәлектәрен, ата-әсәләрҙең социаль заказдарын иҫәпкә алып төҙөлә.

Тәрбиә-белем биреү процесын ойошторға вакытта тәрбиәләү, үҫтереү һәм өйрәтеү маҡсаттарының һәм бурыстарының берҙәмлеген тәьмин итеү кәрәк, шуның менән бергә ҡуйылған маҡсат һәм бурыстарҙы балаларға саманан артыҡ эш бирмәйенсә, кәрәкле һәм етәрлек материалға таянып, тейешле «минимум»ға максималь рәүештә яҡынайтып хәл итеү кәрәк. Белем биреү процесын белем

биреү өлкәләре интеграцияһын иҫәпкә алып, комплекслы-тематик принципҡа нигеҙләнеп ҡороу был маҡсатты тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирә.

Белем биреү эшен бөтә яҡлап төп темаға бәйләп төҙөү, баланың үҫешенә ҙур йоғонто яһай һәм уның практик яҡтан тәжрибә туплауына һәм күнекмәләрҙе башҡарыу ысулдарын үҙләштереүенә, аңлы фекерләүенә төрлө мөмкинлектәр аса. Темалар мәғлүмәттәрҙе төрлө ысулдар менән ойошторорға ярҙам итә.

Төрлө йәштәге төркөмдәрҙә оҡшаш темаларҙы тормошҡа ашырыу мәктәпкәсә осорҙа балалар үҫешендәге күсәгилешлекте һәм белем биреү маҡсаттарының берҙәмлегенә ирешеүҙе, балаларҙың шәхси мөмкинлектәренә ҡарап уларҙың тулы үҫешен тәьмин итә.

Белем биреү процесын ойоштороуҙың тематик принцибы милли-төбәк һәм мәҙәни йөкмәткеле материалдарҙы индерергә, балалар баҡсаһының үҙенсәлеген иҫәпкә алып·эш итергә мөмкинлек бирә.

Бер темаға бирелгән ваҡыт – 2-3 аҙна. Тема төркөмдә һәм үҫеш үҙәктәрендә (мөйөштәрендә) булған материалдарҙы һайлауҙа сағылырға тейеш.

Беренсе төркөмсә балалары менән (1-1,5 йәш) дәрестәр көндөҙ икенсе яртыһында үткәрелә. Балалар 3-5 кешенән торған төркөмсәләргә бүленә һәм дәрес ваҡыты 6 минут тәшкил итә.

1.5 йәштән алып 3 йәшкә тиклемге кесе йәштәге балалар өсөн өҙлөкһөҙ, туранан-тура белем биреү эшмәкәрлеге дауамы 10 минуттан артмай. Белем биреү эшмәкәрлеге көндөҙ беренсе һәм икенсе яртыһында тормошҡа ашырыла (8-10-ар минут). Белем биреү эшмәкәрлеген саф һауала йөрөгәндә уйын майҙансығында ойошторорға мөмкин.

3 йәштән алып 4 йәшкә тиклемге балалар өсөн өҙлөкһөҙ туранан-тура белем биреү эшмәкәрлегенең дауамы 15 минуттан, 4 йәштән алып 5 йәшкә тиклемгеге балалар өсөн - 20 минуттан, 5 йәштән 6 йәшкә тиклемге балалар өсөн - 25 минуттан, ә 6 йәштән 7 йәшкә тиклемге балалар өсөн 30 минуттан артыҡ түгел.

Көндөҙ беренсе яртыһында кескәйҙәр төркөмөндә һәм уртансы төркөмдә рөхсәт ителә торған максималь белем биреү нагрузкаһы күләме, төркөмгә ҡарап, 30 һәм 40 минуттан, ә ҙурҙар һәм әҙерлек төркөмдәрендә - төркөмгә ҡарап, 45

минуттан һәм 1,5 сәғәттән артмай. Өҙлөкһөҙ белем биреү эшмәкәрлегенә бирелгән ваҡыт уртаһында физкультура минуттары үткәрелә. Өҙлөкһөҙ белем биреү эшмәкәрлеге ваҡыттары араһындағы тәнәфестәр 10 минуттан кәм түгел.

Статик характерҙағы туранан-тура белем биреү эшмәкәрлеге уртаһында физкультура минуттары үткәрелә.

| **Белем биреү өлкәләре** | **Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге** | **Төрлө йәштәге балалар төркөмө** | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 2-3 йәш | 3-4 йәш | 4-5 йәш | 5-6 йәш | 6-7 йәш |
| **1. мотлаҡ үҙләштерергә тейеш (60%)** | | | | | | |
| **белем биреү өлкәләре** | **База** | | | | | |
| | Танып-белеү – эҙләнеү әүҙемлеге | | | | | |
| ***Танып-белеү үҫеше*** | Башланғыс ябай математик төшөнсәләр | 1 | 1 | 1 | 1 | 2 |
| | Тирә-йүнде танып белеү<br>Кеше һәм тәбиғәт<br>Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше<br>Социаль донъя менән таныштырыу | 0,5 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Дидактик материал менән эш | | | | | |
| | Коммуникатив әүҙемлек | | | | | |
| ***Телмәр үҫеше*** | Телмәр үҫтереү | 0,5 | 0,5 | 0,5 | 1,5 | 1 |
| | Грамотаға өйрәтеү | | | | | 1 |
| | Нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу | | | | 0,5 | |
| | Сәнғәт әүҙемлеге | | | | | |
| ***Художество-эстетик яҡтан үҫеш*** | музыка | 1 | 0,5 | 0,5 | | |
| | Һүрәт төшөрөү | | | | 1 | 1 |
| | Әүәләү | | | | | |
| | Йәбештереү | | | | | |
| | Ҡоролмалар төҙөү һәм модель ҡороу эшмәкәрлеге | 1 | Режим моменттарында | | | |
| | Төҙөлөш материал менән эш | | | | | |
| | Хәрәкәт әүҙемлеге | | | | | |
| ***Физик үҫеш*** | Бүлмәлә физкультура үткәреү | 2 | 2 | 2 | 1 | 1 |
| | Саф һауала физкультура үткәреү | | 1 | 1 | 1 | 1 |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| *Социаль-коммуникатив үҫеш* | Уйын, әҙәп-гигиена ҡағиҙәләрен үҙләштереү социализация, үҙ-үҙенде хеҙмәтләндереү, хужалыҡ-көнкүреш хеҙмәте. | Режим моменттарында | | | | |
| Хәүефһеҙ йәшәү нигеҙҙәре | | Режим моменттарында | | | | |
| *Аҙнаға* | | 6 | 6 | 6 | 7 | 8 |
| **2. белем-тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли-төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырған материалдар (40%)** | | | | | | |
| Коммуникатив әүҙемлек | | | | | | |
| **Телмәр үҫеше** | Телмәр үҫтереү | 0,5 | | | | 0,5 |
| | Грамотаға өйрәтеү | | | | 1 | 1 |
| | Нәфис әҙәбиәт менән таныштырыу | 0,5 | 0,5 | 0,5 | | 0,5 |
| **Танып- белеү үҫеше** | Тирә-йүнде танып белеү<br>Кеше һәм тәбиғәт<br>Танып-белеүҙә эҙләнеү эшмәкәрлеге үҫеше<br>Социаль донъя менән таныштырыу | | | | 1 | 1 |
| Сәнғәт әүҙемлеге | | | | | | |
| **Художество-эстетик яктан үҫеш** | музыка | 1 | 1,5 | 1,5 | 1 | 1 |
| | Һүрәт төшөрөү | 1 | 1 | 1 | 1 | |
| | Әүәләү | 1 | 0,5 | 0,5 | 0,5 | 0,5 |
| | Йәбештереү | | 0,5 | 0,5 | 0,5 | 0,5 |
| **Аҙнаға** | СанПин 2.4.1.3049-13, п.11.11 буйынса. | 10 | 10 | 10 | 12 | 14 |
| **Режим моменттарындағы аралашыуҙар** | Иртәнге гимнастика | көн һайын | | | | |
| | Сыныҡтырыу сараларының комплексы | көн һайын | | | | |
| | Режим моменттарындағы | көн һайын | | | | |
| | Әҙәби әҫәрҙәр уҡыу | көн һайын | | | | |
| | Дежур итеү | көн һайын | | | | |
| | Саф һауала | көн һайын | | | | |
| | Сюжет-роль уйындары<br>Дидак һәм үҫтереү уйындары<br>Хәрәкәтле уйындар<br>Күҙәтеүҙәр<br>Хеҙмәт | көн һайын | | | | |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | Конструктив-моделләштереү эшмәкәрлеге | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | һынау (тәжрибә) үткәреү | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Уҡыу һәм һөйләү | 1 | 2 | 2 | 2 | 2 |
| | Балалар менән әңгәмә | 1 | 1 | 1 | 1 | 1 |
| | Иллюстрация ҡарау | 2 | 2 | 2 | 2 | 2 |
| | Күңел асыу | Айына 1 тапҡыр | | | | |
| | Спорт уйындарына | Аҙнаһына1 тапҡыр | | | | |
| ***Балаларҙың үҙ-аллы эшмәкәрлеге*** | Үҫеш мөйөштәрендә балаларҙың үҙ-аллы эшмәкәрлеге | көн һайын | | | | |

**Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлегендә мотлаҡ үҙләштерелергә тейеш һәм белем- тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли – төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырылған материалдар өлөшөн һанау**

| Төркөм | Төрлө йәштәге балалар төркөмө | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 2-3 йәш | 3-4 йәш | 4-5 йәш | 5-6 йәш | 6-7 йәш |
| Көнөнә сәғәттәр | | | | | |
| Мотлаҡ үҙләштерергә тейеш ( 60%) | 12 мин | 18 мин | 24 мин | 45 мин | 54 мин |
| Белем- тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап.алынған һәм милли- төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырылған материалдар (40%) | 8 мин | 12 мин | 16 мин | 30 мин | 36 мин |
| Аҙнаһына сәғәттәр һаны | | | | | |
| Мотлаҡ үҙләштерергә тейеш ( 60%) | 60 мин | 90 мин | 120 мин | 195 мин | 270 мин |
| Белем- тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли- төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырылған материалдар (40%) | 40 мин | 60 мин | 80 мин | 130 мин | 180 мин |
| Йылына сәғәттәр | | | | | |
| Мотлаҡ үҙләштерергә тейеш ( 60%) | 222 | 222 | 222 | 289 | 333 |
| Белем- тәрбиә биреү эшендә ҡатнашыусылар тарафынан һайлап алынған һәм милли- төбәк үҙенсәлектәрен сағылдырылған материалдар (40%) | 148 | 148 | 148 | 192 | 222 |
| Бөтәһе | 370 | 370 | 370 | 481 | 555 |